***Рәми Ғариповтың “Башҡортостан” шиғыры буйынса дәрес***
***( 5 класс)***

Маҡсаттар: Рәми Ғариповтың ижадына байҡау яһау,
“Башҡортостан” шиғырын өйрәнеү,
Тыуған илгә һөйөү тойғоһо тәрбиәләү, уның киләсәген ҡайғыртыусы аңлы, белемле, илен, ерен, халҡын яҡларҙай яңы йәш быуынды тәрбиәләү.
Йыһазландырыу: слайдтар, ноутбук, проектор, Рәми Ғариповтың китаптары, фотоһүрәте.
Дәрес барышы:

1. **Ойоштороу (3 минут)**

**Һаумы, сәләм, хәйерле көн-**
**Ниндәй яғымлы һүҙҙәр.**
**Шул һүҙҙәрҙе ишетеүгә**
**Яктыра бара йөҙҙәр.**

Хәйерле көн, бишенселәр! Һеҙҙе бөгөнгө көндә ошо дәрестә күреүемә, яңы уҡыусылар менән танышa алыуыма бик шатмын. Мин Садыҡова Альбина Вәкил ҡыҙы, Өмөтбай мәктәбендә һеҙҙең кеүек матур, шаян уҡыусыларға башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәренән белем бирәм. Бөтәбеҙгә лә уңыштар теләп, дәресебеҙҙе башлайыҡ. Һеҙҙең алдығыҙҙа “Үҙеңде баһалау” карталары ята. Һәр эш төрө өсөн үҙегеҙгә баһалар ҡуйып барырһығыҙ. Ә дәрестә әүҙем ҡатнашҡандарға мин “афарин” карталары таратып барам, уларҙың һанына ҡарап “Уҡытыусының һорауҙарына яуаптар” юлына бергәләп баһа ҡуйырбыҙ.

2. **Төп өлөш. Инеш (5 минут)**

“Бөгөн дәрестә” таҡтаһына ҡарайыҡ әле. Кем икән ул? (Рәми Ғарипов)
Хәҙер экранға күҙ һалайыҡ. (Башҡортостан картаһы)
Тимәк беҙҙең бөгөнгө дәресебеҙ нимәгә арнала һәм ҡайһы автор тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
(Бөгөн беҙ Рәми Ғариповтың “Башҡортостан” шиғыры менән танышабыҙ.)
-Беҙ дәрестә нимәләр эшләргә тейешбеҙ? Ниндәй маҡсаттар ҡуяйыҡ?
(Яуаптар)
-Авторға әйләнеп ҡайтһаҡ, ул беҙгә таныш, эйеме? Һеҙ уның тураһында нимәләр беләһегеҙ?
(Уҡыусыларҙың яуаптары)
-Афариндар! Әйҙәгеҙ экранға күҙ һалайыҡ. Быйыл республикабыҙҙыа “Башҡорт теле йылы” иғлан ителгәс, дәресте шағырҙың иң билдәле шиғырынан өҙөк һөйләмәйенсә башлаһаҡ яҙыҡ булыр, шулаймы? Ниндәй шиғыры әле ул?
(Туған тел)
-Әйҙәгеҙ шуны бергәләп башҡарайыҡ.
(4 юлын һөйләү)

3. **Биография (3 минут)**

Ә хәҙер экранға күҙ һалайыҡ
Экран: Рәми Ғарипов портреты.

Рәми Йәғәфәр улы Ғарипов Салауат районының Арҡауыл ауылында 1932 йылдың 12 февралендә донъяға килгән.
-Әгәр ҙә иҫән булһа Рәми Ғариповтың нисә йәше тулып килгән булыр ине? (88 йәш)
-Эйе, тағы ла, уҡыусылар, беҙ быйыл ҙур иҫтәлекле датаны билдәләргә йыйынабыҙ. Ниндәй дата ул? (Еңеүҙең 75 йыллығы)
Һуғыш башланғанда Рәми Ғариповҡа нисә йәш булған икән?
Эйе, ҡәһәрле һуғыш халыҡ шағирының да тормошон урап үтмәгән.
Атаһы- Йәғәфәр Мөхәммәтрәхим улы үҙ заманы өсөн уҡымышлы кеше булған. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән фронтҡа китә. 1943 йылдың 23 февралендә Сталинград янында ҡаты һуғышта һәләк була. Ғаиләлә дүрт бала ҡала: Рәми, Рауил, Урал һәм Мәршиҙә. Әсәләре Гөлмәрйәм Хизбулла ҡыҙы менән етем ҡалалар. Әсәләре бик эшсән була, уны “Салауат районының комбайны” тип йөрөтәләр.
-Рәми бәләкәйҙән бик күп уҡырға ярата. Һеңлеһе Мәршиҙә: “Рәми бәләкәйҙәән уҡырға яратты, ҡайҙа барһа ла ҡулынан китабы төшмәне. Ул хатта төндәрен шәм яҡтыһында ла уҡый ине”-тип хәтерләй.
-Ошолай күп уҡығаны өсөн иптәштәре уға ҡушамат та таҡҡандар. Ниндәй ҡушамат тип уйлайһығыҙ?

Шул күп уҡып, зирәк, сабыр холоҡло, тыйнаҡ булғаны өсөн уны иптәштәре яратып***“Бабай”*** тип йөрөткәндәр.

**4. Шиғырҙы уҡыу анализ (10 минут)**

-Артабан экранға күҙ һалайыҡ. Нимә күрәбеҙ.
-Уҡыусылар, Башҡортостан нимәгә оҡшаған?(яуаптар) Эйе, шағирҙар ҙа уны төрлө һынға оҡшата, мәҫәлән, Мостай Кәрим :
Ер шарының картаһына ҡараһаң яҡшы ғына
Башҡортостан шул картала бер япраҡ саҡлы ғына,-ти
-Ә Рәми Ғарипов уны нимәгә оҡшата икән? Әйҙәгеҙ шиғырға күҙ һалайыҡ.
***Экран: Рәми Ғарипов:***
***Урал күкрәгендә йөрәк кеүек***
***Башҡортостан-тыуған илкәйем,***-ти
Һәм бөгөнгө дәресебеҙҙең эпиграфы ла шулай яңғырай.
(Ике уҡыусы экрандан уҡый)

Бына шулай беҙҙең Урал тауҙарына, Башҡортостан тәбиғәтенә, уның йылға-күлдәренә, изге күңелле кешеләренә һоҡланмаған кеше булмаған. Шағирҙар шиғыр яҙған, йырсылар моңло йыр сығарған, рәссамдар уның гүзәллеген һүрәткә төшөргән. Шундайҙарҙың береһе- Рәми Ғарипов
-Ҡәҙерле уҡыусылар, ә хәҙер дәреслектең 157-се битен асығыҙ.
“Башҡортостан” шиғырын уҡыйыҡ.( уҡытыусы тасуири уҡып сыға)
(Эстән уҡып сығыу, һүҙлек эше)
Шиғырҙың беренсе куплетын бер уҡыусы уҡып ишеттерә.

Башҡортостан сиген үтеү менән,
Тыуып үҫкән ергә етеү менән,

Нур тулғандай була күңелгә,
Йыр тулғандай була күңелгә.

-Ни өсөн күңелгә нур тула? Ниңә йыр тыуа?
-Шиғырҙың икенсе куплетын бер уҡыусы уҡый.

Йәшел бәрхәт төҫлө еркәй генәм,
Ҡыҙҙар ҡулы төҫлө еркәй генәм.
Иркәләй бит талған күҙемде.
Иркәләй бит арыған йөҙөмдө.

-Ҡыҙҙар ҡулы ниндәй ул? Йәшел төҫ-ул күҙҙәрҙе ял иттерә торған төҫ.
Хәҙер "еркәй" тигән һүҙгә иғтибар итәйек әле. Рус телендәге ниндәй ялғауға оҡшаған? (уменьшительно-ласкательный суффикс) Ә башҡорт телендә былар ниндәй ялғауҙар?
(Яһаусы)
*(Артабан өсөнсө уҡыусы уҡый)*

Йүгереп сығыу менән ҡайындарым,
Онотола барлыҡ ҡайғыларым.
Күреү менән күген Уралдың,
Күҙҙәремә йәштәр уралды.

Ниңә ҡайындар эргәһендә ҡайғылары юҡҡа сыҡты?

*(дүртенсе уҡыусы уҡый)*

Башҡортостан-беҙҙең Башҡортостан,
Иркең ҡурсып күпме бөркөт осҡан!
Башҡортостан-йөрәк ҡағышым,
Ерһенмәһәм, төшһөн ҡарғышың!

Башҡортостандың иркен ҡурсып(яҡлап) ниндәй бөркөттәр осҡан?
***Экран: Салауат Юлаев, Юлай Аҙналин, Ҡаһым түрә, Ҡараһаҡал, Миңлеғәле Ғөбәйҙуллин, Шаморатов генерал, Таһир Кусимов,...)***
Ерһенмәү тигәнде нисек аңлайһығыҙ?(берәй ерҙе, урынды үҙ итмәү, оҡшатмау, яратмау)
*(бишенсе уҡыусы уҡый)*

Һинһеҙ күңелем ҡалай йәшәһен?
Һинһеҙ күңелем ҡалай йәшнәһен?
Башҡа ерҙә ашым ейелмәҫ,
Башҡа ергә башым эйелмәҫ...

Күңел нисек йәшнәй? Башҡа ерҙә ашым ейелмәҫ(ашалмаҫ) тигәнде нисек аңларға була?
Башҡа ергә башым эйелмәҫ тигән һүҙҙәр нимә тураһында һөйләй?
*(алтынсы уҡыусы уҡый)*

Юҡ, кәрәкмәй миңә аһ-ваһтарың,
Ары торһон йәннәт-ожмахтарың.

Башҡортостан-тыуған төйәгем,
Һиндә ятһын ятһа һөйәгем.

Аһ-ваһтар, йәннәт-ожмах  нимә ул? Ниңә шағир уларҙан баш тарта? Һөйәгем һиндә ятһын тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
Унын теләге ҡабул була, ул үҙ Башҡортостанында донъя ҡуя. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы. 1977 йылда 45 кенә йәшендә шағир донъя менән хушлаша. Унын Әммә унын исеме үлмәй, халыҡ хәтерендә мәңге һаҡлана.
Р.Ғарипов исемендә нимәләр бар?
***Экран:***
***1988 йыл- С,Юлаев исемендәге дәүләт премияһы тапшырыла.***
***1992 йыл- Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелә.***
***1989 йыл-тыуған ауылында йорт-музейы асыла.***
***1993 йыл-ошо йорт –музейы алдында Николай Калинушкин эшләгән баҡыр бюст ҡуйыла.***
***1994 йыл- Өфөләге 1-се республика гимназияһына Р. Ғарипов исеме бирелә.***
***1997 йыл- ошо гимназия алдында бюст ҡалҡып сыға.***
***1994 йыл шағир уҡыған гимназияла һәм 1997 йыл Салауат районында Рәми Ғарипов исемендәге премия булдырылды.***

Ике уҡыусынан шиғырҙы тасуири уҡытыу.
(Яуаптар)

5. **Физминутка. (2 минут)**

**Башкортостаным тауҙары**
**Ҡайһылай бейек икән.**
**Үләндәр ҙә билгә еткән**
**Бигерәк оҙон үҫкән.**
**Унға баҡтым-хозурлыҡ,**
**Һулға баҡтым-ғорурлыҡ.**
**Минең илем-Башҡортостан**
**Күпкә өлгө булырлыҡ.**

**6. Парлап (5 минут)**

-Эйе, уҡыусылар, Башҡортостаныбыҙҙа гүзәл ерҙәр бик күп.
Әйҙәгеҙ әле парлап эшләп алайыҡ.
1-се пар шиғырҙан һүрәтләү саралары таба
2-се пар өлөштәргә бүлә
3-сө пар һүҙлек эше
4-се пар шағир нимә әйтергә теләгән?
5-се пар Шиғырҙа авторҙың ниндәй хис-тойғолары сағылыш тапҡан?
6-сы пар шағирҙың Тыуған илгә булған мөхәббәте ниндәй юлдарҙа айырыуса асыҡ бирелгән?
7-се пар шиғырҙың үлсәмдәрен (рифма, ритмдар) табырға
(Парлап эшләйҙәр) (баһалау)

**7.Төркөмдәрҙә эш (5 минут)**

Һеҙгә тыуған ил тураһында мәҡәлдәр әҙерләнем, әйҙәгеҙ уларҙың парын табып сығайыҡ әле.
(Төркөмдә эш, лидер һайлау).
Мәҡәлдәрҙе уҡыу.
-Был шиғырҙың йөкмәткеһенә ниндәй мәҡәл тура килә.
Афариндар, ошонда уҡ төркөмдәрҙә эште дауам итәйек.
“Илебеҙ-Башҡортостан” темаһына ижади эштәр әҙерләйбеҙ.
1-се төркөм йомаҡ
2-се төркөм шиғыр,
3-сө төркөм рәссам булһам
4-се төркөм проект эше.
5 минут бирелә. Эштәрҙе уҡыу, баһалау.
-Бик яҡшы.

**8. Индивидуаль эш. (3 минут)**
Шиғыр буйынса өс һорауҙан торған тестар таратыу.
Үҙебеҙҙе тикшерәйек.
**9. Рефлексия:** (2 минут)
Алты ҡалпаҡ алымы
**Өйгә эш: (2 минут)**
1. Шиғырҙы тасуири уҡырға;
2. Шиғыр буйынса һорауҙар төҙөп килергә;
3. Инша “Республикам 10 йылдан һуң”

**10. Баһалау (2 минут)**